## «Заятүләк менән Һыуһылыу» әкиәтен сәхнәләштереү

*(Өләсәй ейәнсәрен йоҡларға һала)*



Ейәнсәр. Өләсәй, әкиәт һөйлә әле.

Өләсәй. Ниндәй әкиәт һөйләйем икән?

Ейәнсәр. Һыу аҫтында йәшәүсе ҡыҙҙар тураһында әкиәт беләһеңме?

Өләсәй. Мин белмәгән әкиәт бармы икән, балам? Ә ниңә ул һыу ҡыҙҙары тураһында әкиәт ишеткең килә?

Ейәнсәр. Миңә һыу ҡыҙы ҡурсағы оҡшай.



Өләсәй. Ярай балаҡайым,тыңла, улайһа. Борон-борон заманда һыу аҫты батшаһының бик матур, шаян ҡыҙҙары булған. Иң кесеһе- Һыуһылыу. Атаһы рөхсәт итмәһә лә, ул һыу өҫтөнә сығып сәсен тараған, кешеләрҙе күҙәткән.

*(Һыуһылыу яр буйындағы таш өҫтөнә ултырып сәсен тарай.)*



Ҡыҙҙар. Һыуһылыу, һин ҡайҙаааа?

Һыуһылыу. Мин бында-а-а!

Ҡыҙҙар. Әйҙә беҙҙең менән уйнарға.

**Шаян ҡыҙҙар, балыҡтар (йыр йырлайҙар, бейейҙәр)**

1. Тулҡындарҙан, тулҡындарға
   Балыҡтар һикерәләр
   Балыҡтарҙан да матур
   Шаян ҡыҙҙар, һылыуҙар

Балыҡтар йөҙә пыр-пыр,
Тулҡын иркәләй мыр-мыр,
Беҙ йырлайбыҙ, беҙ уйнайбыҙ,
Бейейбеҙ шыптыр-шыптыр.



2.Йүгерәләр, һикерәләр,
Һис кенә тик тормайҙар
Алсаҡ йөҙлө, шат күңелле
Шаян ҡыҙҙар, балыҡтар.

*(Шторм. Балыҡтар ҡурҡалар,өҫкә ҡарайҙар)*

<u>Ҡыҙҙар.</u> Нимә булды?

<u>Балыҡтар.</u> Ярҙам итегеҙ. Карап батты.

*(Балыҡтар кешене һөйрәп алып керәләр)*

<u>Һыуһылыу</u>. Йә, егет, ас күҙеңде!



<u>Егет.</u> Мин ҡайҙа?

<u>Һыуһылыу</u>. Һин һыу аҫты батшалығында. Йә, нисек, оҡшаймы?

<u>Егет.</u> Аһ, ниндәй матурлыҡ. Ләкин миңә ергә ҡайтырға кәрәк.

<u>Һыуһылыу</u>. Ашаҡма, егет. Минең ҡунағым бул.

<u>Егет.</u> Рәхмәт , Һыуһылыуым.

(*Ниндәйҙер тауыш килә. Һыуһылыу егетте йәшерә . Күлзаман инә.)*



<u>Күлзаман.</u> ҡайҙа ул?

<u>Һыуһылыу</u>. Кемде һорайһың атай?

<u>Күлзаман.</u> Саҡырылмаған ҡунаҡ ҡайҙа, тим?

<u>Һыуһылыу</u>. Атай, был егет – минең ҡунағым. Ул ер улы, тау улы, хан улы…

<u>Күлзаман.</u> Кешеләр беҙҙең күлгә ҡунаҡҡа түгел, үлергә төшә!

<u>Һыуһылыу</u>. Атаҡайым, тыңласы, бер ҡыҙыңды аңласы. Ул бит минең ҡунаҡ ҡына.

<u>Күлзаман.</u> Ярай улайһа, егет, күрешәйек, бир ҡулыңды.

<u>Һыуһылыу</u>. Бирмә ҡулыңды, йолҡа уйыңды!

*( Йәшен йәшнәй. Егет ҡулын бирә. Һыуһылыу араға төшә. )*

Һыуһылыу. Атай,тырышма, уның уйҙары – миндә.




Күлзаман. Ярай, егет, ҡара әле, батшаң аяғын һона, үп тиҙерәк, юҡһа башыңды ҡырҡам!

Егет. Юҡ, табан ялап үҫмәнем!

*(йәшен йәшнәй )*

Һыуһылыу. Ҡуй, көсәнмә, атай,уның башы күптән минеке.

Күлзаман. Күҙемә ҡара, туп – тура ҡарай алырһыңмы икән?

Һыуһылыу.Карама тура – йәнеңде һура!

*(Күл тетрәй. Егет менән Күлзаман текләшә.)*

Һыуһылыу. Ҡуй, атай, уның йәне күптән минеке.

Күлзаман. Ярай, егет, насар уй менән йөрөмәйһең икән. Һеҙ еңдегеҙ! Туйғансы ҡунаҡ бул!

Ейәнсәр. Өләсәй, ә егет һыу аҫтында йәшәргә ҡаламы ни?

Өләсәй. Экиәттең дауамын иртәгә һөйләп бөтөрмөн, йоҡла, балам.

